# ЙӘЙҒОР

29 ноябрь 2011 йыл

№8 (22)

Ҡасим Дәүләткилдеев исемендәге республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты гәзите

## ӘСӘЛӘРҘЕҢ ХЕҘМӘТЕ ИҢ АУЫР ҮӘ ИҢ МӘШӘҠӘТЛЕ ХЕҘМӘТТЕР

Ризаитдин Фәхретдин.

## Директор һүҙҙәре



Борон-борондан әсә һөйөү һәм наҙ, ысын тормош ҡиммәттәре сағылышы булып ҡала. Донъя менән танышыуыбыҙ уның тәүге һүҙҙәренән башлана. Әсәнең бөтмәҫ изгелеге һәм күңел байлығы беҙҙең ҡайғы-хәсрәттәрҙән һаҡлай, ауыр хәлдәрҙә таяныс булып тора. Тап ул беҙҙә юғары кешелек сифаттары тәрбиәләй, изге эштәргә фатиха бирә. Фәҡәт уның аҡыллы, төплө кәңәштәре ғүмер буйы беҙҙе оҙата бара.

Әсәлек-яуаплы һәм изге бурыс. Күпселек ҡатын-ҡыҙҙар тыуған йортта усаҡ йылыһын һаҡлап ҡына ҡалмай, барыбыҙ хаҡына көсөн, белемен һәм тәжрибәһен бирә. Улар йәмғиәт тормошоноң бик күп өлкәләрендә ир-егеттәр менән бер тиң фиҙаҡәр хеҙмәт итә.

Әсәләр көнө – һөйөү һәм наҙ байрамы. Барлыҡ әсәйҙәрҙе ошо күркәм байрам менән ҡотлайым. Уларға оҙон ғүмер, һаулыҡ теләп ҡалам!

Ҙур ихтирам менән Ҡ.А.Дәүләткилдеев исемендәге Республика һынлы-сәнғәт гимназия-интернаты директоры Гөлемеш Хәйрулла ҡыҙы Садыҡова.



## Әсәйем

Донъяла һәр кешенең, һәр тере йәндең әсәһе бар. Мин дә башҡаларҙан айырылмайым.Әсәйем миңә генә түгел, тағы ла дүрт балаға ғүмер биргән: ағайыма һәм апайҙарыма.

Беҙҙең ғаилә ҙур һәм бик татыу. Беҙ бер – беребеҙҙе яҡлап, һаҡлап, бер беребеҙгә ярҙам итеп йәшәйбеҙ. Әлбиттә, иң яҡын кеше – әсәйебеҙ Зидә Ғәфүрйән ҡыҙы. Ҡайғыбыҙ, шатлығыбыҙ менән дә тәүҙә уға киләбеҙ.

Мин әсәйем менән ғорурланам, сөнки ул бер үҙе беҙҙе аяҡҡа баҫтырҙы: бәләкәйҙән ҡарап үҫтерҙе, кейендерҙе,тәрбиәләне, уҡытты. Күпме көс кәрәк бының өсөн, әйтеп тә аңлатырлыҡ түгел. Ә бит әсәйебеҙ беҙҙе генә түгел, мәктәптә әллә күпме баланы тәрбиәләй, уҡыта. Сөнки ул уҡытыусы. Уҡытыусы һөнәрен һайлауын ул шулай аңлата: «Мин бәләкәй саҡта рус телен белмәй инем. Телде өйрәнергә уҡытыусым Мария Николаевна ярҙам итте һәм тиҙҙән мин иң яҡшы уҡыусы булып киттем. Ошо ваҡытта уҡытыусы булыу теләге тыуҙы ла инде».Бына күп йылдар минең әсәйем рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. Тормошонда ниндәй генә ауырлыҡтар осрамаһын, ул беҙгә өндәшмәй, үҙе йырып сыға. Мин уның ҡыйыулығына, түҙемлегенә, бер нимәгә лә ҡарамай маҡсатына ирешә алыуына һоҡланам. Шуға ла мин әсәйемә тиң булырға тырышам, үҫкәс мин дә уның кеүек тырыш, көслө рухлы кеше буласаҡмын.

*Япарова Зөлхизә,*
*9а класы уҡыусыһы*



# Һин ҡәҙерле әсәйем

Ул ғына бит ер йөҙөндә
Тик бала тип йәшәй.
Ҡәҙерлеләрҙән-ҡәҙерле
Тик бирәү генә әсәй!

Донъяла бик күп һүҙҙәр бар. Улар береһенән-береһе матур яңғырайҙар. Ләкин шул һанһыҙ һүҙҙәр араһында бөтәһенән дә матурыраҡ ишетелгән, иң изге, гүзәлдәрҙән-гүзәл һүҙ бар. Ул һүҙ кешенең күҙ өҫтөндәге ҡаш йәки керпек бөртөктәре кеүек ҡыҫҡа ғына һүҙ. Һәр кеше был һүҙҙе йөрәгенең һәр тибеүе һайын әйтергә лә әҙер. Был “әсә” тигән һүҙ.

Әсә һүҙе бала өсөн иң изге, һине оло юлға баҫтырған, йәшәргә, тормош ауырлыҡтарын еңергә өйрәткән, кәңәштәрен биргән кеше.

Тормошобоҙҙағы бөтә ҡәҙерле минуттар әсәй менән бәйләнгән. Кеше әсәһенең йомшаҡ, йылы ҡулдарын, изге ҡараштарын тыуғандан алып беләләр. Әсәй ул – изгелек тә, матурлыҡ та, шәфҡәтлек сағылышы ла.

Әсә… ғаилә… бала… Тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына һүҙҙәр, әммә ошо өс һүҙ донъя бөтөнлөгөн һәм дә бәхетте аңлата.

Әсәйем Баймаҡ районының Юлыҡ мәктәбендә уҡыта. Ул үҙ эшен бик яратып, күңелен биреп башҡара. Ололарҙы ихтирам итә, һәр кешегә ярҙам итергә әҙер тора. Әсәйем бик аралашыусан, бөтөн ауырлыҡтарҙы ла йырып сығырҙыай кеше. Бына инде ул 19 йыл мәктәптә уҡытыусы булып эшләй.

Мәктәптә “Оҫта ҡулдар” түңәрәген алып бара. Уҡыусыларҙы матур итеп бәйләргә, сигергә өйрәтә. “Оҫта ҡулдар” түңәрәгендә эшләгән ҡул эштәрен конкурстарға ебәрәләр. Лайыҡлы грамоталар, дипломдар һәм төрлө бүләктәр менән бүләкләнәләр.

Әсәйем уңған, егәрле кеше. Биш бала әсәһе лә ул.Беҙҙең бөтәбеҙҙе берҙәй итеп ярата, кәңәштәр бирә. Уның йылы ҡулдары сәстәребеҙҙе иркәләй, яғымлы тауышы күңелебеҙҙе тынысландыра. Беҙҙең кескәй генә уңыштарыбыҙ өсөн дә ысын күңелдән шатлана.

Әсәйем миләүшә сәскәләрен үҫтерергә ярата. Уларҙы яратып, күңеле йылыһын биреп үҫтерә, шуға ла улар гөрләп сәскә ата.

Әсәй! Әсәкәйем минең! Тормоштоң барлыҡ әсеһен-сәсеһен татып, ауырлыҡтарға бирешмәй һаман алға ынтылып йәшәүең менән сикһеҙ ғорурланам. Ауырымай, беҙҙе ҡыуандырып, ғаиләне яҡтыртып оҙон-оҙаҡ йәшә. Бәхетле бул. Һәр саҡ шулай алсаҡ күңелле, оло йөрәкле булып ҡал. Ғүмерең матур үтһен. Һәр ваҡыт йөҙҙәрең көләс һәм күҙҙәрең шат булһын.

Ышан, әсәй! Ҡайҙа ғына булһам да, һинең исемеңә тап төшөрмәм. Һинең өмөттәреңде аҡлар өсөн ҡулымдан килгәндәрҙең бөтәһен дә эшләрмен.

Әсә… ғаилә… бала… Яғымлы һәм мөғжизәле һүҙҙәр! Ошо һүҙҙәр алдында баш эйәйек.

***Байегетова Зөһрә,***
***10 а класы уҡыусыһы***

# Әсәй

Күңелемә йылы биргән
Әсәйем-әсәкәйем
Ҡәҙерленең ҡәҙерлеһе
Әсәйем-әсәкәйем
Күкрәк һөтө имеҙгәнһең
Сәңгелдәк йырын йырлап
Әле лә яныр йәшәйһең
Ғүмерем күген нурлап!

*М. Ибраһимова.*

Әсәй! Ер йөҙөндә иң гүзәл, иң ғәзиз һүҙ – әсәй! Шул һүҙ менән баланың теле асыла һәм ул бөтә телдәрҙә лә берҙәй татлы яңғырай.

Һәр кемдең дә иң яҡын кешеһе-әсәй! Әсәнең генә йомшаҡ ҡулдарын, мөләйем ҡарашын, яғымлы һүҙҙәрен бер нимә менән дә сағыштырып булмайҙыр. Әсә йөрәге иң һиҙгере, тиҙәр. Унда балаға булған мөхәббәт хисе бер ҡасан да һүнмәй.

Һәр кем – сабыйҙар ҙа, өлкәндәр ҙә – әсә назына мохтаж. Әсәйеңә мөхәббәтең ни хәтлем көслө булһа, тормошоң да шул ҡәҙәр шатлыҡлы һәм яҡтыраҡ була.

Борон-борондан алып бөгөнгө көндәргә тиклем әсәйҙәрҙе данлап, уларға арнап күп һүҙҙәр әйтелгән, йырҙар йырланған, шиғырҙар яҙылған.

Әсә кеше балаһын наҙлап, һөйөп үҫтерә, бар көсөн, ғүмерен арнай. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы ҡайһы бер кешеләр әсә ҡәҙерен белеп еткермәйҙәр. “Әсә күңеле балала, бала күңеле далала” тип боронғолар мәҡәлде юҡҡа ғына әйтмәгәндер. Мәҫәлән: “Сак менән Сук” бәйетен дә әсә ҡарғышы алып береһе көн, икенсеһе төн ҡошона әүерелеп икеһе ике яҡҡа осоп китә. Бер-береһе һәм әсәләрен һағынып, күрә алмай ыҙалағандан һуң ғына үҙ хаталарын аңлай улар.

Шуға күрә, бер ҡасан да әсәйҙәрегеҙҙе рәнйетмәгеҙ, ауыр һүҙ әйтмәгеҙ! Ер йөҙөндә әсәй берәү генә, уның ҡәҙерен беләйек!

***Гәлина Айзада, 8а класы уҡыусыһы***

# Әсәй

Әсәй. Был һүҙҙәрҙе ишеткәс күңелдә шундай яҡтылыҡ, яғымлылыҡ, йылылыҡ балҡый. Әсәй бит ул иң яҡын кеше. Ул һәр бер ҡыйынлыҡтарҙа һиңә ярҙам итеп, йыуатыр. Ҡапыл ауырып киткән саҡтарҙа үҙенең йылы, йомшаҡ ҡулдары менән ҡосағына ҡоһа, ауырығаның бөтөп киткән һымаҡ була. Яғымлы ҡарашы менән, йомшаҡ һүҙҙәр әйтеп йыуатыуҙары бәләкәс кенә йөрәгемә йылылыҡ өҫтәгәндәй. Юҡҡа ғына ла бит халҡым ижадында изге йән эйәләре тураһында мәҡәлдәр, әйтемдәр уйлап сығарылмаған. Шуларҙың береһе: Әсә йөрәге бала тип өҙөлөр.

Минең әсәйем – Зөлфиә исемле. Уға утыҙ туғыҙ йәш. Әсәйем һоро сәсле, һоро күҙле. Ҡамыр кеүек йомшаҡ ҡулдары бөтә эшкә лә оҫта. Ул беҙгә үҙ ҡошсоҡтарына аштарҙы, бәлештәрҙе тел йоторлоҡ итеп бешерә. Киләсәктә мин буласаҡ әсәй булараҡ та әсәйем мине лә аш-һыу араһында булышырға саҡыра һәм тәмлекәстәренең серҙәрен аса,сөнки тормошта кәрәге тейәсәк бит уның кәңәштәре. Әсә кеше-өй йәме,донъя тотҡаһы. Баҡсабыҙҙа үҫкән аллы- гөллө сәскәләр ҙә ,балҡып торған тап-таҙа йортобоҙ ҙа, һалҡын ҡыш көндәрендә әсәйемдең күҙ нурҙары төшкән ойоҡ-бейәләйҙәрен дә лә уның көсө, сыҙамлығы,тырышлығы ярылып ята. Был эштәрҙең барыһына ла әсәйем мине өйрәтә. Шуға күрә лә мин әсәйемде бик яратам, уға бағышлап бер нисә шиғырҙарым да бар. Донъялағы иң яғымлыһы-ул минең әсәй,иң матуры-минең әсәй,иң белемлеһе-минең әсәй, иң түҙемлеһе-минең әсәй, иң бөйөгө-минең әсәй, иң аҫылы-минең әсәй, иң изгеһе – минең әсәй. Ҙур үҫеп, уҡып сыҡҡас, мин әсәйемде тәрбиәләйәсәкмен, сөнки ул мине сабый саҡтарымда күҙ нурҙарын йәлләмәйенсә йоҡоһоҙ күпме төндәр үткәргән. Мин уның алдында бурыслымын.

Әсә яҡын миңә,
Диңгеҙ кеүек,
Тәрән,нәфис уның күңеле.
Үҙе ябай,
Бала өсөн генә

Үтә төҫлө әсә ғүмере, тип – Мәлик Харис юҡҡа ғына тәрән йөкмәткеле шиғыр яҙмағандыр. Ә уның был шиғыр юлдарында күпме хаҡлыҡ, дөрөҫлөк ярылып ята.

***Даминдарова Элмира,***
***7в класы уҡыусыһы***

# Әсә наҙы йәнгә һары май

*Сәрүәр Ғәләүетдинов*

Әсәй. Ниндәй яғымлы һүҙ был. Донъялағы иң яратҡаны, иң яҡыны бит ул. Ауыр ваҡыттарҙа яғымлы һүҙҙәр менән йыуатыр ҙа, ауыр эштәрҙә бергәләшер ҙә, ҡыҙым тип яратып ҡына өндәшер ҙә әсәкәйем минең. Әсәй. Был һүҙҙе ишетеү менән күҙ алдыма һәр ваҡыт ҡара сәсле, йомшаҡ ҡуллы яратҡан әсәкәйем килеп баҫа. Мин уны шундай ныҡ итеп яратам, хатта ҡайһы бер ваҡыттарҙа үҙем дә һиҙмәй ҡалам уның йылы ҡосағына барып ингәнемде.Уның йомшаҡ ҡына ҡулдары мине күкрәгенә ҡыҫып ҡоса, күңеле - тәрән диңгеҙ, тәрән һәм нәфис, әсәлек хисе, әсәлек ғорурлығы-йәшәйешемдең асылылыр, моғайын. Нурлы йөҙөнән, наҙлы һүҙҙәренән миңә ниндәйҙер көс өҫтәлә. Һәр иртә һайын наҙлап иркәләп йоҡонан уятыуҙарын һағынам мин, сөнки Ҡ.А.Дәүләткилдеев исемендәге респупублика һынлы сәнғәт гимназия-интернатына уҡырға ингәс миңә әсәйемдең күңел йылыһы етмәй. Мине ул мәктәпкә китер алдынан сәс толомдарымды икегә ярып үреп, матур итеп кейендереп оҙатып ҡала ине. Уҡыуҙан ҡайтыуымды тәмле аштары менән, бөхтә итеп йыйыштырылған өйөбөҙҙә мине сабыр ғына көтөр ине. Ҡапма-ҡаршы ултырып сәй эскән саҡтарҙы нисек һағынмайһың да, нисек юҡһынмайһың? Ошондай минуттарҙа ул миңә йыш ҡына үҙенең бала сағы тураһында хәтирәләр йомғағын һүтә ине. Бигерәк тә минең бәләкәй сағымдың матур миҙгелдәрен һағынып һөйләр ине; тәү тәпәй баҫҡан мәлемде лә, тәү әйткән һүҙҙәремде лә ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс итеп иҫләр ине, хатта ҡыҫҡырып көлгө килеп китә, күңелгә нисектер йылы булып ҡала.

Минең әсәйемдең алтын ҡулдары бөтә эшкә лә оҫта. Берҙән-бер ҡыҙы булараҡ мине лә эшкә өйрәтергә тырыша ул. Ул ниндәй генә эш башламаһын,мин унан һә тигәнсе отоп алам. Сослоғом өсөн мине маҡтап алырға ла онотмай.

Әсәкәйемдең мөхәббәте ҡояштан ҡайнар, йондоҙҙарҙан бейек, диңгеҙҙәрҙән тәрән бит ул. Ошо ҡайнар тойғоларҙың ҡәҙерен белергә кәрәк. Беҙ барыбыҙ ҙа әсәләргә бурыслыбыҙ.Уларҙы хөрмәтләргә тейешбеҙ, сөнки әсәкәйем миңә ғүмер бүләк иткән. “Әсә наҙы йәнгә һары май” тип Сәрүәр Ғәләүетдинов юҡҡа ғына әйтмәгән бит.

***Сибәғәтуллина Йолдоҙ,***
***7в класы уҡыусыһы***

## Әсәйем

Минең әсәйем унған
Һәр эшкә лә өлгөрә.
Ҡулдары уның алтын
Бөтә эштәрҙе белә.
Һәр ваҡыты, минуттары
Тик беҙгә тиеп үтә.
Ҡай саҡ ауыр ваҡыттарҙа
Әҙер йәнен бирергә.
Тыуғандан уҡ ул беҙҙе
Кейендерҙе,үҫтерҙе.
Нык яратты ул беҙҙе
Барлыҡ һөйөүен бирҙе.
Әсәйем әҙер тора
Беҙгә ярҙам кәрәкһә.
Балаларым эш белһен тип
Беҙҙе эшкә өйрәтә.
Әсәйем әрләп тә ала
Тыңламаған саҡтарҙа
Ни булһа ла була инде,
Әсәй-берәү донъяла!
Яратам мин әсәйемде,
Уның назлы күҙҙәрен,
Бары тыңлайым мин
Әйткән һәр бер һүҙҙәрен!

***Ләйсән Рәхимколова***
***7б класы уҡыусыһы***

## Әсәйемә

Әсәкәйем, бәгерем
Берҙән-берем ҡәҙерлем.
Һин бит үҫтерҙең мине
Мин бит яратам һине.
Көн һайын, әсәкәйем,
Тәмле аштар бешерә.
Наҙлы ҡулдары менән,
Йылы икмәктәр телә.
Иртә һайын гел генә,
«Тор ҡыҙым!” -тип өндәшә.
Кисен килеп янымa,
“Тыныс йоҡо” – тип әйтә.
Әсәй, һинең күҙҙәреңдән,
Наҙлы нурҙар бөркөлә.
Арып ҡайтһам мәктәптән,
Ҡосағыңа һирпеләм.

***Ләйсән Мәүлитова,***
***7б синыф уҡыусыһы***

## Әсәйем

Йондоҙҙарҙы алыр инем,
Әсәй, һиңә бүләккә.
Сәскәләр ҙә бирер инем,
Әйтеп матур теләктәр.
Төнөн йондоҙға ҡараһам,
Иҫләтә гел үҙеңде.
Һинең яҡты ҡарашыңды,
Йомшаҡ, иркә һүҙеңде.
Иртән ҡояшҡа ҡараһам,
Күрәм унда йөҙөңдө.
Күрәм наҙлап һөйөүеңде,
Йылы, рәхәт өйөмдө.

***Зилә Рәжәпова,***
***6а класы уҡыусыһы***

## Әсәйем

Рәхмәт, әсәй! Был донъяла
Беҙгә ғүмер биргәнеңә
Шишмә йырлай, ҡоштар һайрай,
Һиңә генә, һиңә генә.
Рәхмәт, әсәй, барыһына.
Беҙҙе ҡарап үҫтергәнгә
Ҡыуанып, шатланып ҡына
Йәшә, әсәй, йәшә генә!

***Айзилә Мөләкова,***
***8а класы уҡыусыһы***

# БӨЙӨК ШАҒИРҘАРҘЫҢ ФӘҺЕМЛЕ ФЕКЕРҘӘРЕ

Әсәйҙәрҙең күҙе - иң матур күҙҙәр,
Әсәйҙәрҙең һүҙе – иң назлы һүҙҙәр.
Улар бирәләр иң дөрөҫ кәңәш,
Улар булалар иң яҡшы серҙәш.

*Кәүсәриә Шафикова*

*****

Әсә нәфрәтенә тиң нәфрәт, әсә мөхәббәтенә тиң мөхәббәт юҡ донъяла.

*Фәнил Әсәнов*

*****

Ил йәшәй әсәйҙәр менән,
Беләйек ҡәҙерҙәрен.

*Фәрит Богданов*

*****

Был донъяла кем һуң бөйөк
Әсә бөйөк.
Ҡарамай ул был донъяға
Ҡашын төйөп.

*Йомабикә Ильясова*

*****

Тәрбиәле әсәләр был донъяла оло бәхет үә сәғәҙәттер.

*Ризаитдин Фәхретдин*

Әсә мөхәббәте ҡояштан ҡайнар, йондоҙҙарҙан бейек, диңгеҙҙәрҙән тәрән бит ул. Донъяла был мөхәббәт- теләкте тыйыр ҡөҙрәт тә юҡ.

*Риф Мифтахов*

*****

Әсә хаҡынан да изге нәмә юҡ.

*Мостай Кәрим*

*****

Әсәлек хисе, әсәлек ғорурлығы – йәшәйештең асылы, моғайын, ул кешелек таңында уҡ тыуған иң изге, иң бөйөк, иң мәңгелек хистәрҙең береһелер.

*Сабир Шәрипов*

*****

Күңелдәрҙә мәңге тере йәшәйҙер,
Ул фәрештә, ул бөйөк зат – әсәйҙер…

*Кәҙим Аралбай*

*****

Тәбиғәттең бер самими, тиңһеҙ
Көсө – әсә булыу бәхете.

*Фирҙәүес Бәширова*

Гәзит 2000 йылдан башлап нәшер ителә
Тиражы: 50 экз.
Мөхәрририәт:
Ғәзизова Ә.С., Килдиғошова З.М., Ҡолманова Л.Ә., Әминева Г.Б.
Баш мөхәррир урынбаҫары: Мәхмүтова Н.С.
Баш мөхәррир:
Хакимйәнова Венера Салауат ҡыҙы
Верстка, дизайн, фото:
Радионов Артур Иванович